**Гонаһлы был донъя**

Арабыҙҙа гонаһлылар күбәйҙе,
Ҡалманы һис бер кемдә, Хоҙай ҡәҙере.
Вәғәздәре бер нисек тә файҙа бирмәй,
Сөнки йәндәрен ураны гонаһ әжере.

Ир - ҡатындар тыныс йәшәй алмай,
Араларында никах бөткәнгә.
Ирҙәрҙә ысын ғәйрәт бөттө,
Алҡа тағып, ҡатын булып киткәнгә.

Ата –әсәгә балалар бойһонмайҙар,
Иманһыҙ, килеш донъяға тыуғанға.
Иманһыҙлыҡ сирхауҙа уларҙың юлы,
Шайтан менән уртаҡ уйҙа булғанға.

Был донъяға,ғүмерем буйы ғәжәпләнәм,
Яман эште, яҡшы тейеп ҡылғанға.
Иғтибар юҡ Изге Хоҙай Һүҙенә,
Ҡарындары харам ризыҡ менән тулғанға.

Иманды шулай итеп хурлап йөрөгәс,
Шайтан тота уларҙы тотҡонда.
Гонаһлы донъяны - улар әхирәт иткән.
 Алла юлын алмаштырып упҡынға.

Һәр көнөң өсөн хисап алыр, Хоҙай бер көн,
Бармы тейеп, ҡылған эшең Хоҙай алдында.
Ата – әсәләр булған һәр саҡ Хоҙай янында,
Иманһыҙлыҡ – ул наҙанлыҡ, тип ҡурҡҡанға.

Эй, Хоҙайым, һаҡла Һин мине,
Шул йәһәннәмдәге упҡын утынан.
Төн йоҡом минең, йоҡотүгел,
Гонаһтарым күп булыуға ҡурҡыуҙан.

Эй, Хоҙайым, ярҙам ит Һин Үҙең,
Бар күңелем менән сығынамын мин Һиңә.
Кисер, бар гонаһтарымды,
Мин ғәйепле бәндә, фатихаңды бир миңә.

Эй, Хоҙайым, Һин Үҙең яҡла мине,
Һиңә генә мин бит бирелеп иманам.
Ҡиәмәт көнө еткәс Хоҙайым,
Мине ҡаршыалырһың тип ышанам.